

## «Башкирэнерго» асыҡ акционерҙар йәмғиәтенең генераль директоры Н.А. Курапов:

# «Бурыстарҙы ҡайтарырға ваҡыт»

*Февраль айында «Башкирэнерго» асыҡ акционерҙар йәмғиәтендә 2001 йылғы эш һөҙөмтәләрен, коллектив килешеүҙең үтәлешен һәм администрация менән «Электропрофсоюз» рескомының 2002-2004 йылдарға килешеүе проектын тикшереү буйынса конференция булып үтте. Ҡулланыусыларҙың электр һәм йылылыҡ энергияһына мохтажлыҡ кисермәүе, ҡулланылған ресурстар хаҡының һуңғы йылдарҙа тәүге тапҡыр 97 проценты түләнеүе һәм түләүҙәрҙең 96 проценты аҡсалата булыуы 20 меңдән ашыу хеҙмәткәрҙе берләштергән коллектив өсөн иң мөһим һөҙөмтәләрҙең береһе булды, тип билдәләп үтелде. Алынған килемдән 1 млрд һум энергетика хужалығын яңыртыуға бүленде. Шул уҡ ваҡытта әлегә 4,2 млрд һумлыҡ абонент бурыстары энергетиканың үҫешен тотҡарлай. Шулай ҙа, акционерҙар йәмғиәтенең бизнес-планында ҡаралғанса, газға хаҡтар артҡанға тиклем тарифтарҙы күтәрмәү, бер нисә ҙур инвестиция проектын тормошҡа ашырыу һәм илдең яңыса формалашып килгән энергетика баҙарына юғалтыуһыҙ инергә мөмкинселек бирерлек реструктуризация үткәреү күҙ уңында тотола. «Башкирэнерго»ның ошо йүнәлештәрҙәге эшмәкәрлегенә аңлатма биреүҙе һорап, акционерҙар йәмғиәтенең генераль директоры Н.А. Кураповҡа мөрәжәғәт иттек.*

**— Николай Андреевич, һеҙҙә ҡулланыусылар менән көйлө мөнәсәбәттәр һаҡлана, күрше регионларҙағы кеүек, предприятиеларҙы, ауыл һәм ҡасабаларҙы, тотош ҡала микрорайондарын энергияһыҙ ҡалдырыу кеүек ҡаты саралар ҡулланылмай. Әммә, уның ҡарауы, «Оренбургэнерго»ның абонент бурыстары алты көн, «Татэнерго»ныҡы 18 көн тәшкил итһә, «Башкирэнерго»ныҡы — өс ай ярым.**

— Беҙ ҡулланыусыларыбыҙға ихтирам менән ҡарайбыҙ. Республика етәкселегенең энергетика өлкәһендәге сәйәсәте ошоға ҡоролған да инде: ҡулланыусылар энергосистема өсөн түгел, ә киреһенсә, энергосистема кешеләр өсөн. Хатта иң ауыр ваҡыттарҙа ла бер кем дә, кинәйәләп әйткәндә, арбаны аттан алда ҡуйырға маташманы. Шул тәртип арҡаһында беҙ, Башҡортостан халҡы, «шок терапияһын» һәм 90-сы йылдарҙағы башҡа ауыр һәм

ҡатмарлы һынауҙарҙы мөмкин булғанса әҙерәк юғалтыуҙар һәм киселештәр менән үткәреп ебәрҙек. Эйе, һуңғы ун йыллыҡта беҙ бурысҡа эшләнек тип әйтергә була һәм асылда шуның менән сәнәғәтте кредитланыҡ, ә хәҙер инде, сәнәғәттә үсеш күҙәтелгәндә (2001 йылдың һөҙөмтәләре буйынса етештереү күләменең үсеше 5,6 процент тәшкил итте), уға, энергосистемаға бурыстарын ҡайтарып, беҙҙе кредитларға сират етте. Баҙар шарттарында бурыстарҙы һыҙып ташлау тураһында бер ниндәй ҙә һүҙ булыуы мөмкин түгел.

Ҡулланыусылар үҙҙәренең яғына ҡайырһа ла, беҙ үҙебеҙҙең талаптарҙы һәм принциптарҙы үҙгәртмәйбеҙ. Конструктив һөйләшеүҙәр алып барабыҙ. Быltыр октябрҙә «Башкирэнерго»ла бурыстары булған райондарҙың һәм ҡалаларҙың хакимиәт башлыҡтары менән кәңәшмә булып үтте. Ауыл халҡына энергетиктар менән иҫәпләшеү мөмкинлеге тәҡдим ителде — ауыл хужалығы продукцияһын оператор ролен үтәгән киң профилле «Промцентр» предприятиеһы аша һатыу. Күп кенә хужалыҡтар ошо юлды һайланы, уларға ярҙам йөҙөнән республика хөкүмәте бюджеттан 210 млн һум бүлде.

Күптән түгел Белоретта һәм Сибайҙа тармаҡтың ҡулланыусылар менән эш штабы күсмә ултырыш үткәрҙе. Уны генераль директорҙың реализация буйынса урынбаҫары Радмир Ғәфәр улы Һаҙыев һәм «Электропрофсоюз» рескомы рәйесе Ирек Яҡуп улы Булгаков алып барҙы. Әйтергә кәрәк, ошо йыйылыш төбәктәрҙәге бурыслы предприятиелар өсөн файҙалы булды. Улар барыһы ла тиерлек быltырғы бурыстарын ҡайтарҙы, ағымдағы түләүҙәр һәм электән йыйылған бурыстарҙы түләү графиктарын ҡабул итеүҙә килешеүгә килдек.

**— Ә бурыстарын ҡайтарырға теләмәүселәргә ҡарата ниндәй саралар ҡулланыла?**

— Ҡыҙғаныsҡа ҡаршы, улар араһында үтә йылғырҙар ҙа бар, түләмәҫ өсөн төрлө хәйләләргә баралар. Ҡайһы бер хужалыҡ етәкселәре банкротлыҡҡа һылтаналар. Һуңынан инде бурысты кредиторҙың үҙ юғалтыуҙарына индерәләр. Ҡайһылары, ауыл халҡына пайҙарын таратып биреп, яңы, әлбиттә бурысһыҙ, колхоздар ойошторалар. Ошондай яңы хужалыҡтар һаны республиканың 30 районында йөҙгә тулып килә. Шуға күрә акционерҙар йәмғиәте идараһының тәүге ултырыштарының береһен хоҡуҡи мәсьәләләргә бағышларға тура килде. Ултырышта реализацияны туҡтатыу һәм «Энергосбыт»тың юридик хеҙмәтен киңәйтеү тураһында ҡарар ҡабул ителде. Был аңлашыла ла: яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә алып, юридик күсәгилешлекте тәьмин итеп эшләргә кәрәк.

**— Түләү тәртибе яҡшыра икән, компанияның инвестиция эшмәкәрлеге лә арта. Улар берберeһе менән бәйле. Быйыл тормошҡа ашырыласаҡ проекттарҙың иң мөһимдәре ниндәй?**

— Яңы объекттар күп һалынмаясаҡ, әммә уларҙың һәр береһе бик мөһим. Өфөлә 5-се ТЭЦ-та 450 мегаваттлыҡ пар-газ ҡоролмаһы (ПГУ) төҙөлә башлаясаҡ — был бөтә системаның дөйөм ҡеүәтенең ундан бер өлөшөн тәшкил итәсәк. Ҡоролманың бәләкәй габаритлы һәм автоматлаштырыу кимәле юғары булыуы уны хеҙмәтләндереүселәр һанын кәметәсәк, ә экологик хәүефһеҙлеген башҡалар менән сағыштырырлыҡ та түгел.

Был уникаль электростанция, әлбиттә, инвесторҙарҙың иғтибар үҙәгендә. Объекттың «Башкирэнерго» структураһынан үҙаллы акционерҙар йәмғиәте сифатында бүленеп сығыуы ла быға булышлыҡ итәсәк.

Өфөлә 110 киловольтлыҡ «Ишимская» подстанцияһы төҙөлөүгә лә инвесторҙар йәлеп итергә иҫәп тотабыҙ. Был подстанция сәнәғәт пред-

приятиеларын һәм башҡаланың яңы микрорайондарын электр энергияһы менән тәьмин итеүҙе яҡшыртасаҡ.

**— Ниһайәт, көньяҡ-көнсығыш Башҡортостанда ла яңы электр станцияһы барлыҡҡа киләсәк — Сибайҙа 32 мегаватт проект ҡеүәтле газ турбиналы ТЭЦ төҙөлә. Үҙенең подстанциялары аша республиканың көньяҡ-көнсығыш райондарының электр селтәрҙәренә тоташҡан Магнитҡалағы инцидент был төҙөлөштө тиҙләтеүгә этәргес булманымы?**

— Магнитогорск металлургия комбинатында, күп кенә башҡа ҙур сәнәғәт предприятиеларындағы кеүек, ике теплоэлектроцентраль бар, шул уҡ ваҡытта «Челябэнерго» селтәрҙәренән дә электр энергияһы ала, һәм уға 180 млн һумлыҡ бурысы йыйылған. Бурыстарын түләү, йәки өлөшләтә ҡайтарыу тураһында энергетиктар менән килешеү урынына, предприятие етәкселеге комбинатты электр энергияһы менән үҙаллы тәьмин итеүгә күсергә булды. Ярай әле предприятиены өлкә селтәрҙәре менән тоташтырған линияны өҙөргә ашыҡманы. Тиҙҙән үҙ ҡеүәттәре генә етмәүе асыҡланды, технологик тотҡарлыҡтар килеп тыуҙы, Сибайҙың селтәрҙәрендә лә энергия кәмене. Ахырҙа бурыстар түләнеп, энергия менән тәьмин итеүҙәге тотҡарлыҡтар бөтөрөлдө, әммә беҙ бынан яҡшы һабаҡ алдыҡ.

Тағы ла төҙөлөш тураһында. Шаҡша микрорайонында һәм Ағиҙел ҡалаһында 8 мегаватт ҡеүәтле, Өфөләге 5-се һанлы ТЭЦ-та 18 мегаваттлыҡ газ турбиналы энергетик ҡоролмалар төҙөүҙе планлаштырабыҙ, Йомағужа ГЭС-ы төҙөлөшөнә 230 млн һум йүнәлтеләсәк. Бөрө һәм Һаҡмар йылғаларында бәләкәй ГЭС-тар барлыҡҡа киләсәк.

**— Николай Андреевич, беҙҙә Өфө ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары А.С.Йосопова ҡул ҡуйған хат бар. Ул ҡала халҡының үтенесе буйынса аңлатыу һорап мөрәжәғәт итә: «Беҙҙе «Башкирэнерго» асыҡ акционерҙар йәмғиәте тирәһендә килеп тыуған хәлдәр борсой. Беҙгә предприятие бүленәсәге һәм уның бер нисә милексеһе барлыҡҡа киләсәге тураһында мәғлүм. Бәхәсһеҙ, ҡулланыусылар өсөн был бигүк шәп булмаясаҡ...» Һүҙ башланған реструктуризация хаҡында. «Башҡортостан варианты» нимәнән ғибәрәт?**

— Беренсе этапта беҙ акционерҙар йәмғиәте составынан «Энергоавтоматика», «Энергоремонт» һәм «Энергостройремонт» сервис ойошмаларын сығарҙыҡ. Хәҙер улар үҙаллы эшләй һәм иҡтисади эшмәкәрлек өсөн киңерәк мөмкинлектәр алды.

Сиратта — автотранспорт хужалығы һәм дауалау-һауыҡтырыу комплексын, ике санаторий-профилакторийҙы, ике ял базаһын һәм балалар өсөн һауыҡтырыу үҙәктәрен берләштергән социаль сектор. Торлаҡ йорттарҙың күбеһе, 17 мәктәпкәсә йәштәге балалар учреждениеһы муниципаль милеккә күсте лә инде. Былар тарифтарҙы һаҡлау һәм кәметә башлау, энергетика продуктының киләсәктә конкуренция һәләтен күтәреү өсөн эшләнә. Ысынлап та, ниңә әле, әйтәйек, ҡарт пенсионер, ут һәм йылы өсөн түләп, ҡуйылған тариф аша энергетиктарҙың ялы, дауаланыуы өсөн түләргә тейеш? Энергетиктарҙың социаль хәле иһә унан ғына насараймаясаҡ. Конференцияла ла был мәсьәлә тикшерелде. Мәҫәлән, мохтаж булған хеҙмәткәрҙәр өсөн курорт-санаторий путевкалары хаҡын кәметеү өсөн быйыл ике тапҡырға күберәк аҡса бүленә.

**— «Башкирэнерго» әлеге хәлендә һаҡланып ҡаласаҡмы?**

— Юҡ, күҙалланыуынса, ул холдинг компанияһы буласаҡ.

**— РАО ЕЭС холдингы кеүегерәкме?**

— Ул холдинг илдең берҙәм энергетика системаһын бүлгеләү һәм

ғәмәлдә юҡҡа сығарыу өсөн ойошторолған булһа, беҙҙеке, киреһенсә, республика энергетика системаһын һаҡлап алып ҡаласаҡ. Уларҙың айырмаһы шунда. Башҡортостан энергетика холдингы бер нисә етештереү, селтәр һәм күмәртәләп һатыу компанияһының, шулай уҡ оператив-диспетчер идаралығының төп милексеһе буласаҡ. Бында борсолорлоҡ сәбәптәр бөтөнләй юҡ.

**— Шулай ҙа бөгөнгө хәлгә әйләнеп ҡайтайыҡ: 16 февральдә Федераль энергетик комиссия РАО ЕЭС күрһәткән хеҙмәтләндереү өсөн абонент түләүен 1000 киловатт-сәғәткә 53,93 һумдан 61,23 һумға тиклем күтәреү тураһында ҡарар ҡабул итте. «Иркутскэнерго», «Татэнерго» һәм «Башкирэнерго» өсөн абонент түләүе 40,25 һум кимәлендә билдәләнгән. Бирелгән «льготалар»ҙан файҙаланырға йыйынаһығыҙмы?**

— Юҡ, әлбиттә. Ниндәй «күрһәткән хеҙмәтләндереү» булһын бында? Беҙҙең электр селтәрҙәрен ҡулланған өсөн үҙебеҙҙән үк хаҡ алырға йыйыналар. Картаға ҡарау ҙа етә: беҙҙең республика селтәрҙәре аша тәүлек әйләнәһенә төньяҡтан көньяҡҡа һәм үҙәк Рәсәйҙән Себергә, Волга буйына бик ҙур энергетика ағымдары үтә. Әммә берәү ҙә беҙгә бының өсөн бер тин түләмәй. Хәҙер егерме беренсе быуат, баҙар мөнәсәбәттәре осоро, һәм беҙ икеләтә сығымдарға юл ҡуя алмайбыҙ — үҙ линияларыбыҙҙы бушлай ҡулланырға бирергә, өҫтәүенә, кемгәлер абонент хаҡы түләргә.

**— Николай Андреевич, әңгәмәгеҙ өсөн рәхмәт. Журнал редакцияһы Һеҙгә һәм коллегаларығыҙға энергетика системаһындағы структур үҙгәртеп ҡороуҙы уңышлы тамамлауығыҙҙы теләй.**

*Й.Бураңғолов һәм М.Мөхәмәтйәнова әҙерләне.*